ЙӘМӘҒӘТ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ
ХАЛЫҠ-АРА БЕРЛЕГЕ
«БӨТӘ ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ
ҠОРОЛТАЙЫ (КОНГРЕСЫ)»

450015, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 43

МЕЖДУНАРОДНЫЙ СОЮЗ
ОБЩЕСТВЕННЫХ ОБЪЕДИНЕНИЙ
«ВСЕМИРНЫЙ КУРУЛТАЙ
(КОНГРЕСС) БАШКИР»

450015, г.Уфа, Революционная, 43

# БОЙОРОҠ РАСПОРЯЖЕНИЕ

14 декабрь 2019 йыл | № 010-б | 14 декабря 2019 года

## Башҡорт теле йылын үткәреү тураһында

Башҡорт телен популярлаштырыу, республикала һәм башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә уны уҡытыу шарттарын яҡшыртыу, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһында башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ҡулланыу даирәһен киңәйтеү маҡсатында:

1. 2020 йылды Башҡорт теле йылы тип иғлан итергә.
2. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты аппаратына комиссиялар менән берлектә Башҡорт теле йылы сиктәрендә уҙғарылған сараларҙы тормошҡа ашырыу буйынса методик күрһәтмәләр әҙерләргә. Башҡарма комитет ултырышында раҫларға.
3. Төбәк ҡоролтайҙарына (район, ҡала, субъект һ.б.) ойоштороу комитеттары, урындарҙа сараларҙы тормошҡа ашырыу буйынса командалар төҙөргә, Башҡорт теле йылын үткәреү тураһында Положение, төп саралар планы әҙерләргә.
4. Мәғариф, фән һәм башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү комиссияһына баһалау критерийҙарын билдәләргә һәм жюри составын раҫларға.
5. Төбәк ҡоролтайҙары (район, ҡала), шулай уҡ муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре араһында Башҡорт теле йылы сиктәрендә сараларҙы һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу буйынса конкурс үткәрергә.
6. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты аппаратына сараларҙы ойоштороусыларҙы һәм ҡатнашыусыларҙы методик, консультацион һәм башҡа ярҙам менән үҙ ваҡытында тәьмин итергә.
7. Бойороҡто бойомға ашырыуҙы контролдә тотоуҙы Мәғариф, фән һәм башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү комиссияһына йөкмәтергә.

Президиум рәйесе Э.Р. Айытҡолова